1. **Башҡорт алфавитында нисә хәреф бар?**
   1) 32
   2) 42
   3) 33
   4) 43

2. **Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен билдәлә:**
   1) Ә, ү, ç, н, ғ, һ, б, ҙ, ө
   2) Ү, ң, ғ, ы, ә, ҙ, ө, ç, ҡ
   3) Ө, э, ҙ, ç, ң, ғ, ү, ә, һ
   4) Ә, ө, ғ, ç, ҙ, һ, ү, ң, ҡ

3. *<u>Ни эшләй?</u>* **һорауына яуап булған һүҙҙе билдәлә:**
   *1)* уҡыусы
   *2)* матур
   *3)* һөйләшә
   *4)* ун ике

4. **Ҡайһы һүҙгә *<u>ниндәй?</u>* һорауын ҡуйып була?**
   1) ете
   2) аҡыллы
   3) яҙа
   4) тиҙ

5. **Йорт хайуандары һәм ҡоштары ғына булған рәтте билдәлә:**
   1) айыу, төлкө, һыйыр, күгәрсен
   2) һарыҡ, этәс, быҙау, күркә
   3) ҡуян, ҡарға, өкө, ҡолон
   4) йылҡы, һайыҫҡан, кәзә, ҡаҙ

6. Ере барҙың иле ...

   **Мәҡәлде тамамлап ҡуй:**
   1) ярлы
   2) матур
   3) бай
   4) беҙҙеке

7. **Ниндәй һүҙҙәр ҙур хәреф менән яҙыла?**
   1) предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр
   2) предетты белдергән һүҙҙәр
   3) кеше исемдәре, хайуандар атамалары
   4) кеше исемдәре, ер-һыу атамалары

8. **Көҙ башында тәбиғәт ниндәй була?**
   1) Ҡояш ҡыҙҙыра
   2) Ҡар яуа, буран ыжғыра

3) Ҡоштар осоп килә
4) Ямғыр яуа, япраҡтар ҡойола

**9. Предметтың билдәһен төрлө миҡдарҙа белдереүсе  һүҙҙәрҙе билдәлә:**
1) өс, ете, ун
2) кеше, уҡыусы, ҡәләм
3) әсе, үтә әсе, әскелт, әсерәк
4) килә, уҡый, яҙа

**10. Тәржемәһе дөрөҫ булмаған һүҙҙәрҙе билдәлә:**
1) Туҡһан һигеҙ – девяносто восемь
2) Быйма  - валенки
3) Йомшаҡ –мягкий
4) Татыу – твердый